# МИЛЛӘТЕБЕҘ БАҪМАҺЫ

*«Ватандаш» журналының донъя күреүенә быйыл алты йыл тулды. Ошо осорҙа ул меңләгән уҡыусылары өсөн тоғро дуҫ, серҙәш, юлдаш һәм фекерҙәшкә әүерелде, башҡорт халҡын тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса ҙур эш алып бара. Редакция коллективы II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреүгә бер көнлөк эш хаҡын күсерҙе.*

*Журнал редакцияһы үҙенең даими авторҙары, мөхәрририәт ағзалары, үҙ уҡыусылары менән «түңәрәк өҫтәл» үткәрҙе. Баш мөхәррир Фәрит Вафа улы Әхмәҙиев был осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙың киләсәктә журналдың йөкмәткеһен, биҙәлешен байытыу йәһәтенән тәкдимдәрен ишетергә теләүен белдерҙе.*

*Бына ниндәй фекерҙәр әйтте әңгәмәселәребеҙ.*

**БҮКӘНОВА Роза Ғафар ҡыҙы, тарих фәндәре докторы:**

— «Ватандаш» журналын сыға башлаған көндән алып уҡып барам. Үҙенең тәүге һандарынан уҡ ғалимдарҙы ғына түгел, бар уҡыусыларын да ҡыҙыҡлы, фәһемле яҙмалары менән йәлеп итә. Журнал биттәрендә ғилми, тарихи мәҡәләләр менән бер рәттән башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәтенә ҡағылышлы уҡымлы материалдарға күп урын бирелә. Теге йәки был районға, ҡалаға арналған мәҡәләләр шәлкеме лә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята, сөнки унда район һәм ҡаланың тарихи үткәне, бөгөнгө сәйәси һәм иҡтисади хәле, киләсәккә пландары менән танышырға мөмкин, урындағы халыҡ тураһында ла киң мәғлүмәт бирелә.

Ғалимә булараҡ шуны ла әйтә алам: һәр һанда доклад, лекция, реферат өсөн бай материал табырға мөмкин, журнал һәр ғалимдың, уҡытыусының, студенттың өҫтәлендә ятырға тейеш.

**БАЯЗИТОВ Сынтимер Биктимер улы, Өфө ҡалаһы мәғариф идаралығы начальнигы:**

— Республикабыҙҙа 1996 йылдан алып сығып килгән «Ватандаш»ты бик кәрәкле сәйәси, фәнни-популяр журнал тип иҫәпләйем. Бөгөнгө көндә ул беҙҙең уҡытыусыларыбыҙҙың изге хеҙмәтендә тоғро ярҙамсы булып тора. Журнал биттәрендә республикабыҙҙың тарихы, социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләренә ҙур урын бирелә. Тел, дәүләт теле мәсьәләләренә арналған актуаль мәҡәләләр донъя күрә. Уҡытыусыларыбыҙ дәрестәргә әҙерләнгәндә ошондай фәһемле материалдарға таяна. Мине журнал биттәрендә мәғариф мәсьәләләрен яҡтыртыуға даими иғтибар бирелеүе айырыуса ҡыуандыра.

Журнал редакцияһы коллективы киләсәктә лә шулай халҡыбыҙҙың милли традицияларын, матур йолаларын, изге ғөрөф-ғәҙәттәрен халыҡҡа еткерһен.

**ХӨСӘЙЕНОВ Ғайса Батыргәрәй улы, академик, яҙыусы, «Ватандаш» журналының тәүге баш мөхәррире:**

— Журналда «Әҙәбиәт», «Сәнғәт», «Әҙәбиәт ғилеме» рубрикалары һәм бүлектәре бар. «Әҙәбиәт» бүлегендә элек-электән иң яҡшы әҙәби әҫәр өлгөләре генә бирелә килә. Был традиция әле лә дауам итә.

Киләсәктә әҙәбиәт ғилеме буйынса ниндәйҙер яңы фекерҙәр сағылдырған мәҡәләләр күберәк булһа ине. Әлбиттә, тарих һ.б.



05.2002 Part 1.p65 61 06.06.02, 17:13

бүлектәрҙә былдай материалдар даими баҫыла килә.

Дөйөм алғанда, журналда баҫылған мәҡәләләрҙең фәнни-популяр булыуына ҙур иғтибар бирергә кәрәк. Улар бөтә кешеләр ҙә ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ һәм хәтерҙә ҡалырлыҡ булырға тейеш. Быны мин мөһим бурыс тип һанайым.

**УРАҠСИН Зиннур Ғәзиз улы, академик:**

— Журнал тел мәсьәләләренә ҙур иғтибар бирә. Һуңғы ваҡытта телебеҙҙең үҫешендә яңы этап башланды. Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың телдәре тураһында закон ҡабул ителде һәм әле уны ғәмәлгә ашырыу дәүере бара. Тел тураһында законды тормошҡа ашырыуҙа һәр матбуғат баҫмаһы ҡатнаша ала һәм ҡатнашырға тейеш тә. «Ватандаш» был юҫыҡта әүҙем эшләй.

Киләсәктә лә журналда тел, уның ижтимағи функцияларын үҫтереү, яңы һүҙҙәр, телдең системаһын камиллаштырыу буйынса материалдар баҫылыр тип уйлайым.

**ҠОЛШӘРИПОВ Марат Мәхмүт улы, профессор, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты деканы:**

— «Ватандаш»ты универсаль журнал тиер инем. Мин, тарихсы булараҡ, журналдың үҙебеҙҙең халыҡтың тарихи үткәнен әүҙем яҡтыртыуын билдәләп үткем килә. Журнал биттәрендә әлегәсә донъя күрмәгән бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле материалдар баҫылды. Улар араһында сит илдәрҙә йәшәгән милләттәш ғалимдарыбыҙҙың мираҫы байтаҡ. Мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлиди хеҙмәттәре, Абдулҡадир Инандың тарихи сығанаҡҡа бай яҙмалары, Ибн Фаҙландың сәйәхәтнамәләре...

«Ватандаш»та тарихи-публицистик материалдарға ҙур урын бирелә. Был мәҡәләләрҙең актуаллеген билдәләп үтеү мөһим. Әйтәйек, һуңғы ваҡытта беҙҙең республикала, бөтә илдә федерализм принциптары тураһында бәхәстәр ҡуйыра башланы. Шуға күрә журналда ошо темаға арналған публицистик мәҡәләләрҙең донъя күреүе бик урынлы.

Киләсәктә лә матур традициялар дауам итһен.

**ВӘЛИЕВ Дамир Жәүәт улы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры:**

— «Ватандаш» — киң даирәле журнал, ул милләтебеҙ журналына әүерелде. Башҡортостандан ситтә, башҡа төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең проблемаларын да даими күҙ уңында тота.

Шуның менән бергә, ул ижтимағи-сәйәси журнал да. Глобалистика мәсьәләләре лә ситтә ҡалмай. Башҡа төбәктәр, сит илдәр менән мөнәсәбәттәргә ҙур иғтибар бирелә.

Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре менән даими таныштырып барыуы ла отошло. Улар араһында Башҡортостандан ситтә, сит илдәрҙә йәшәгән кешеләр ҙә байтаҡ. Һәр арҙаҡлы шәхес лайыҡлы баһа алырға хаҡлы.

Журналдың йөкмәткеһе, биҙәлеше йылдан-йыл яҡшыра барыуы ла журнал уҡыусыларҙың һанын арттырыуға булышлыҡ итер тип уйлайым.

**СӨЛӘЙМӘНОВ Әхмәт Мөхәмәтвәли улы, академик, Рәсәй Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының сектор мөдире:**

— Фольклорсы күҙлегенән сығып әйтер фекерем шул: «Ватандаш» — беҙҙең өсөн бик кәрәкле журнал. Бигерәк тә 1998 йылдың 21 ғинуарында Президентыбыҙ М.Ғ. Рәхимов ҡул ҡуйған «Фольклорҙы өйрәнеү һәм пропагандалау тураһында» программа ҡабул ителеүе һәм ошо уңайҙан журналда фольклор материалдарының баҫылыуы айырыуса әһәмиәтле. Әлегәсә аҙ билдәле, тик боронғо яҙмаларҙа, архивта ғына һаҡланып ҡалған фольклор материалдарын табыу һәм баҫтырыу бурысы йылдам атҡарыла. Был йәһәттән мин Ғ.Б.Хөсәйеновтың айырыуса әүҙем эшләүен билдәләп үтер инем.

70-се йылдарҙа табылған бик күп яҙмалар донъя күрҙе. Беҙ был мираҫты күп томлыҡтарға туплап, ки-



05.2002 Part 1.p65 62 06.06.02, 17:13

ләһе быуындарға еткерергә бурыслыбыҙ. Ниндәйҙер сәбәп менән әлегәсә баҫырға рөхсәт ителмәгән сәсәндәрҙең исемдәре билдәлелек алыуы ҡыуандыра.

Халҡыбыҙҙың ижады бик бай. Әммә ул төпһөҙ ҡоҙоҡ түгел. Халыҡ ижадын махсус әҙерлекле фольклорсылар ғына түгел, үҙ халҡының ҡомартҡыларына һаҡсыл ҡараған һәр зыялы яҙып алып, журнал редакцияһына ебәреп, баҫтыра ала. Журнал редакцияһы эргәһендә махсус фольклор фонды булһа, бик отор инек.

Күҙ уңынан ысҡындырмай торған проблемалар ҙа байтаҡ. Әйтәйек, ҡайһы берәүҙәр гәйнә башҡорттарының теле башҡорт теленә ныҡ яҡын, тип яҙа. Был иһә гәйнә башҡорттары башҡорт теленән алыҫ тора тигәнде аңлата. Башҡортостанда ғына түгел, бөтә Оло Башҡортостанда — тарихи Башҡортостанда йәшәгән халыҡтарҙың теленә иғтибар бирергә тейешбеҙ. Сөнки ул туранан-тура фольклорға бәйләнгән. Фольклор — телде һаҡлаусы хазина.

*Зөһрә Алтынбаева яҙып алды.*






Журнал «Ватандаш» получил всероссийское признание: об этом красноречиво свидетельствуют диплом Всероссийского конкурса «Деловая женщина – 2001», учрежденного Союзом журналистов России, и диплом третьей степени Всероссийского конкурса за лучшее журналистское произведение патриотической тематики «Женщины России — на службе Отечеству», которым был награжден главный редактор журнала Фарит Ахмадиев в апреле этого года.

«Ватандаш» бөтә Рәсәйҙә танылыу яулаған журнал. Унын Рәсәй журналистар союзы тарафынан раҫланған «2001 йылдың эшлекле ҡатынҡыҙы» Бөтә Рәсәй конкурсы дипломына лайыҡ булыуы быны асыҡ дәлилләй. Ә быйыл апрель айында журналдың баш мөхәррире Фәрит Әхмәҙиев «Рәсәй ҡатын-ҡыҙҙары Ватанға хеҙмәт итеүҙә» тигән патриотик тематикалы иң яҡшы журналист әҫәрҙәре Бөтә Рәсәй конкурсында III дәрәжә диплом яуланы.

The journal «Vatandash» has been generally recognized — a Diploma of the All-Russian competition «Business Woman — 2001», founded by the Journalists' Union of Russia, and a Diploma of the third degree of the All-Russian competition on the best journalistic product on the patriotic theme «A Woman of Russia on the Service to Fatherland», the editor-in-chief of the journal Farit Ahkmadiev was awarded with, evidence it.